ВОСХОД
№38 (10085)
Пятница
29 сентября 2023 года
АРГАЯШ МЕДИА
ARGAYASH.COM

АРҒУЖА

БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ МАХСУС БИТ №9 (150)
СЕНТЯБРЬ, 2023 ЙЫЛ

ТАРИХ

# БӨЙӨК ШӘХЕС ЭШЕ

## РАФАЭЛЬ МӨХӘМӘТЙӘНОВ БАҪЫЛМАҒАН ХЕҘМӘТТӘРЕН БАҪТЫРАБЫҘ



Рәшит Хәкимов, Урал Сафиуллин һәм Рафаэль Мөхәмәтйәнов менән берлектә. Силәбе башҡорттары атҡаҙанған мәҙәниәт һәм фән эшмәкәрҙәрен хөрмәтләй. **БАЖИКӘЙ МӘКТӘБЕ АРХИВЫНАН ФОТОҺЫ.**

**Төрлө ваҡытта «Арғужа» баҫмаһы менән редакция хеҙмәткәрҙәре Луиза Әминева һәм Гилминса Аҡҡужина менән бергә Арғаяш районының Почетлы гражданы, Башҡортостан Республикаһының Атҡаҙанған уҡытыусыһы һәм тыуған яҡты өйрәнеүсе Рафаэль Мөхәмәтйәнов шөғөлләнә.**

Бөйөк ишан Зәйнулла Рәсүлев эше Башҡалар araһында Рафаэль Мөхәмәтйәновты ла борсой. Был ҡулъяҙманы беҙ редакция архивында таптыҡ һәм үтеп китә алманыҡ.

Быйыл ислам белгесе, ғалим, философ, табип Зәйнулла Хәбибулла улы Рәсүлевтең тыуыуына 175 йыл тулды. Ул 1833 йылда Башҡортостандың Учалы районында донъяға килгән. Башланғыс белемде тыуған ауылында ала, аҙаҡ белемен күрше Муйнаҡ ауылында дауам итә. 1851 йылда Троицкиға Әхмәт Миңгәрәй мәҙрәсәһенә уҡырға килә. Был мәҙрәсәне 1859 йылда тамамлай һәм Верхеурал өйәҙенең Аҡҡужа мәҙрәсәһенең мөҙәрисе итеп тәғәйенләнә.

Зәйнулла Рәсүлев дин менән генә булмай. Башҡа фәндәр менән дә бик ҡыҙыҡһына. Бохаранан алдырып күп китаптар уҡый, белемен киңәйтә, донъяға ҡарашын камиллаштыра. Киләсәктә Хажға барырға хыяллана һәм уның изге теләггеҙ һалае ғәмәлгә аша. 1869–1870 йылдарҙа бер бай ярҙамы менән Хаж сәфәренә юллана. Хаждан ҡайтышлай, Истамбул ҡалаһында туҡтала. Унда ислам дине белгесе шәйех Әхмәтзыязитдин Гульмунашеви менән осраша, уға имтихан тапшырып, «тулы белемле камил хәлфә» тигән баһа ала. Уға ғалим Нәҡшбәндиә суфыйҙары туғанлығына алыу хоҡуғы – танытма бирә (Нәҡшбәндиә – ислам диненең бер йүнәлеше).

Ауылына ҡайтҡас, ул ошо дин йүнәлешен йәйелдереү өсөн эш башлай. Ул мәүлит, ғәйет байрамдарын сәхрәләргә сығып үткәрә башлай. Был байрамдарҙа йөҙәрләгән кеше ҡатнаша. Аҙаҡ ул Троицк ҡалаһында «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенә нигеҙ һала һәм уны 33 йыл буйына етәкләй. Был мәҙрәсәлә меңдәрсә башҡорт, татар, ҡаҙаҡ балалары белем алалар, Нәҡшбәндиә дин ғилемен тараталар. Зәйнулла Рәсүлевтең дан-шөһрәтекөндән-көн үҫә, артҡандан-арта бара. Әммә был ҡайһы бер көнсөлдәргә бигүк оҡшамай. Зәйнулла ишан халыҡты батшаға ҡаршы ҡоторта, тип ошаҡлайҙар. Аҙаҡҡы сиктә Зәйнулла Рәсүлевте 9 йылға Вологда губернаһына һөргөнгә ебәрәләр. Ни өсөн һуң ишан өҫтөнән ялыуҙар күп була? Сөнки Зәйнулла ишан дингә яңыса ҡарай: халыҡтан, донъянан айырмай, ә был иҫке ҡарашлы дин әһелдәренә оҡшамай. Башҡорт, татар, ҡаҙаҡ халыҡтарында донъяға, дингә яңы ҡараш тыуҙырған данлыҡлы ишан 1917 йылдың 2 февралендә вафат була. Бөтә Ер шарына билдәле шәрҡиәтсе (востоковед) академик В.В. Вартольд күп кенә гәзит-журналдарҙа «башҡорт халҡының рухи короле» тип яҙып сыға.

Зәйнулла ишан Рәсүлев милләтебеҙҙе идея, дини тәғлимәт тирәһенә туплап ҡына ҡалмаған, уның генетик аңын, физик, рухи потенциалдарын да уята алған. Бөйөк ишандың тормош юлын, уның донъяға ҡарашын, тәжрибәһен, алымдарын беҙгә өйрәнәһе генә ҡала.

**ФЕКЕР**

**Зинфира Ғизәтуллина, Бажикәй урта дөйөм белем биреү мәктәбе директорының тәрбиә эше буйынса урынбаҫары:**

«Бажикәй мәктәбендә туған телде уҡытыуға ҡулланылған ҡараш шунда: беҙ аралашыуҙы түгел, ә тормош талап иткәнсә, социаль-адаптацияланған шәхес тәрбиәләүҙе өйрәтәбеҙ. Тәрбиә балалар менән туған телдә һөйләшеүебеҙҙе талап итә, улар дәрестә барған ваҡиғаларға битараф ҡала алмаһын өсөн. Башҡорт теле дәрестәрен һаҡлау беҙҙең мәктәптең ғорурлығы булып тора. Аҙнаһына 2-3 сәғәт дәрестәр балаларыбыҙға предмет буйынса район, өлкә һәм төбәк-ара олимпиадаларҙа күп тапҡыр призер булырға мөмкинлек бирә. Уҡыусылар араһында губернатор һәм президент гранттары эйәләре бар, улар балалар өсөн яҡшы өлгө булып тора. Йыл һайын мәктәп базаһында уҡыусыларҙың әҙәби ижады буйынса өлкә семинар-практикумы үтә, ул уҡыусылар конкурсы менән берләштерелә. Быңдай традицияға билдәле уҡытыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре Рафаэль Мөхәмәтйәнов нигеҙ һала. Сара һөҙөмтәһендә район һәм өлкә уҡыусыларының әҫәрҙәре йыйынтыҡтары баҫылып сыҡты, уларға беҙҙең мәктәп балаларының эштәре лә инде».

# ИЛЛЕНСЕ СҮМӘЛӘ (КҮБӘ)

**Әнүәр ағай менән Фәтихә еңгә быйыл бесәнгә бик ихлас тотондолар. Хәйер, көндәре лә бик тура килеп тора, яуым-төшөм юҡ, эҫе генә. Берике көн килеп бергәләшеп күршеләре менән ҙур яланды һыпырып ташланылар.**

Быңа яландағы сабылған бесән дә кипте. Көндәр боҙолмаҫ борон йыя һалырға кәрәк. Йәйге каникулда туған-тыумаса, балалар ҙа килгәндәр. Улар кипкән бесәнде кыраға тарта башланылар, ә Әнүәр ағай менән Фәтихә еңгә күбә һалырға тотондолар. «Көн бик тә тымырһа булып китте, ҡолаҡ та ҡысытып тора, әйҙә, күбәләрҙе ваҡ-ваҡ ҡына итеп һалайыҡ», – тине ағай еңгәгә. Фәтихә еңгә: «Йә һуң», – тип кенә килеште. Хуш еҫ аңҡып торған яланда эш ҡыҙҙы ғына. Бала-саға йүгерешеп бесән тырмай. Төшкөһөн тиҙ-тиҙ генә тамаҡ ялғап алдылар ҙа тағы эшкә керештеләр. Ҙурыраҡ күбәләрҙе һалғанда Әнүәр ағай күбәләр башына менеп тапап та төшкөләй, бала-сағаны әйҙүкләп ҡабаландыра.

Ҡара тиргә батып эшләй торғас, көн дә кисләне. Күбә башында торған Әнүәр ағай сүмәләләрҙе хисапларға тотондо. Бер тапҡыр хисаплап сыҡты яландағы күбәләрҙе, ике тапҡыр. Юҡ... Барыбер күбәләр һаны 49 килә лә сыға. Шул саҡ ағай бик ҡәтғи генә итеп тирәләгеләргә бойорҙо: «Йә, нимә ҡарап тораһығыҙ, бер нисә күбәнең һәленеп торған бесәнен тырмалағыҙ ҙа илленсе сүмәләне ултыртып ҡайта һалайыҡ, көн дә кисләне». Барыһы ла ҙур ихласлыҡ менән эшкә тотондолар. Илленсе күбә өсөн бесән дә булды. Уны ағай ҡаҡҡылап-һуҡҡылап, бер урынға өйөп ебәрҙе. Аҙаҡ өйөлгән 50-се күбә янында һыуыған сәйҙәрен ҙур ҡәнәғәтлек менән эстеләр ҙә ауыл яғына ыңғайланылар.



ТАРИХ

# МИЛЛИ ТАРИХ

**Туғандар! Беҙ был ерҙә ҡунаҡ ҡына. Ҡәҙерен беләйек. Һуғыш юлына киткән ир-егеттәребеҙ иҫән-һау ҡайтһалар ине. Аллаһы Тәғәлә уларға көс, ҡеүәт, иҫән-һау ҡайтыуҙарын насип итһен. Ҡара көстәрҙе-дошмандарҙы еңеп ҡайтһалар ине. Бар туҡлыҡ һәм шатлыҡ ҡына яуһын илебеҙгә. Туғандар, онотмайыҡ: ауырлыҡтан һуң еңеллек килә. Ниндәй генә һынауҙар баҫһа ла бирешмәйек, сабыр булайыҡ. Хоҙай Тәғәлә донъяларға тыныслыҡ бирһен. Ата-әсәһенә һәм бар булған туғандарына һаулыҡ-сәләмәтлек, балаларына тәүфиҡ бирһен һәм дә илебеҙгә тыныслыҡ! Амин.**

*Шәйхетдинова Хәсәнә Вәдүт ҡыҙы, Хужа ауылы.*

## Хәтерләрҙә һаман сал ҡаялар

*Хәтерләрҙә һаман сал ҡаялар,*
*Батырҙарҙың шанлы эштәре.*
*Утлы йылдар һүнмәҫ*
*тарих яҙған,*
*Яңы биттәр торған өҫтәлеп.*
*Ышаныслы ятҡан*
*ҡара урмандар*
*Ирек даулар яуҙар эҙҙәрен.*
*Шишмәләр ҙә моңло*
*итеп көйләй*
*Халыҡтарҙың үткән ғүмерен.*
*Именлек юҡ был*
*илдәрҙә күптән,*
*Оҙаҡҡалыр ығы-зығылар.*
*Шуны һиҙеп әллә һинең көстәр*
*Урынынан яйлап ҡуҙғала.*
*Зәғифләнгән быуын*
*балалары беҙ,*
*Ҡайҙан беҙгә түҙем килгәндер.*
*Нисек тыуып, ҡалай йәшәгәнде*
*Хоҙай ғына белһә белгәндер.*
*Именлек юҡ бер ҙә донъяларҙа,*
*Яу орола ҡолаҡ янында.*
*Шишмәләр ҙә*
*моңло итеп көйләй*
*Халыҡтарҙың үткән ғүмерен.*
*Унда бәхәс, бында*
*талаш-тартыш,*
*Кем бүлешә илен, кем тыуар.*
*Тик ниңәлер*
*артмай байлығыбыҙ,*
*Үкһеләнә бара ер-һыуҙар.*
*Ер тарая, өлгөрәйек тиеп,*
*Хакимдар һәм байҙар ер бүлешә.*
*Ярлы ябыҡ ҙур бер иләү булып,*
*Ауыл бирер, үлһәм ҡәберем.*

## Һаумы, мәктәп!

*Һәр көн һайын һиңә йүгереп киләм,*
*Белем шишмәһенең тәүге баҫҡысы!*
*Тәбиғәттең, донъя серҙәренең*
*Һин бит бөтмәҫ алтын асҡысы!*
*Тыған көнөң менән, мәктәбем!*
*Бына бөгөн ярһып, ашҡынып,*
*Һиңә килдем әле, мәктәбем.*
*Ниҙән башлап һине маҡтайым,*
*Ниҙәр генә бүләк итәйем?!*
*Шул ваҡытта күңелем түренән*
*Урғып сыҡты шиғыр юлдарым.*
*Бүләк булһын, иҫтәлеккә булһын*
*Тиеп минең һөйгән мәктәбем.*
*Һиңә ете йәштән йүгереп килдем*
*Ялан аяҡ белем алырға.*
*Белем шишмәһе бик йомарт булды*
*Сарсап килгән бала-сағаға.*
*Уҡытыусы апай һөйләгәнде*
*Түкмәй-сәсмәй отоп алабыҙ.*
*Тәнәфестә «Ғынала»ны йырлап,*
*Тыпырҙатып бейеп алабыҙ.*
*Һуғыш йылы... Аслыҡ, яланғаслыҡ...*
*Ас булһаҡ та ҡаушап ҡалманыҡ.*
*Дәрестән һуң сарыҡ, шуҡай кейеп,*
*Төрлө ерҙән ризыҡ сүпләнек.*
*Мәктәп алдында һәр көн уҡытыусы*
*Һуғыш хәлдәрен һөйләп алды.*
*Немец илбаҫары ҡайһы яҡта,*
*Ҡайһы ҡаланы баҫып алды.*

## Байрам менән, хөрмәтле ололар!

*Көҙгө көн үҙенең матурлығы менән*
*Айырыла башҡа миҙгелдән.*
*Ә ололар йәштәр араһында*
*Айырыла аҡыл-фиғел менән.*
*Сәсегеҙгә ҡырауҙар һибелгән,*
*Маңлайҙарға һырҙар һалынған.*
*Улар һеҙҙең тормош тарихтарын*
*Һөйләп тора ысын күңелдән.*
*Ә бит донъя тыныс түгел ине,*
*Һеҙҙең үҫеп килгән йылдарҙа.*
*Күҙ йәштәре аҡты һәр бер өйҙә,*
*Аслыҡ хөкөм һөрҙө һәр ерҙә.*
*Үлән ашап үҫкән һөйәктәр ныҡ,*
*Рухығыҙ ныҡ әле һаман да.*
*Шөкөр, тиегеҙ тормош ғүмерҙәрҙе*
*Берәм-берәм ваҡлап барһа ла.*
*Ололар бит улар кәңәшсе лә,*
*Йыуатыусы ауыр саҡтарҙа.*
*Улар ауылдарҙың бөтмәҫ даны,*
*Ғаилә ҡото бергә саҡтарҙа.*
*Хаҡығыҙ юҡ ололарҙы кәмһетергә,*
*Йәберләргә, көлөп ҡарарға.*
*Һеҙ бит ололар ярҙамында*
*Өйрәндегеҙ тормош ҡорорға!*
*Хаҡығыҙ юҡ ололарҙы рәнйетергә,*
*Ололар бит тормош нигеҙе.*
*Нигеҙе нык булған йортта ғына*
*Шатлыҡ гөрләп тора, билгеле.*
*«Йәштәр! Һеҙгә ысын*
*күңелдән әйтәм:*
*Һеҙгә лә бит ҡартлыҡ киләсәк.*
*Шул ваҡытта иҫегеҙгә төшөр:*
*«Ни сәскәнһең, шуны урырһың».*
*Ашығығыҙ изгелек эшләргә*
*Ололар иҫән-һау саҡтарында.*
*Үкенерһегеҙ ғүмер буйы*
*«Терһәкте тешләп булмай» тиеп тә.*
*Оҙаҡ йәшәгеҙ, ололар, һаулыҡ менән,*
*Ҙур шатлыҡтар менән йәшәгеҙ!*
*Киләсәктә һәр көн ҡояш көлһөн,*
*Ҡайғы-хәсрәт күрмәй йәшәгеҙ!*

**Ф. ИСМӘҒИЛЕВА,**
*уҡытыусы ветеран.*

# ТУҒАН ТЕЛДӘ УҠЫ

**Силәбе дәүләт университетының ғилми китапханаһы фондтарында башҡорт халыҡтың тарихына, мәҙәниәтенә, көнкүрешенә һәм йолаларына арналған башҡорт телендәге баҫмалар һаҡлана.**

Китаптарҙың ҡайһы берҙәре Икенсе донъя һуғышы осоро тип билдәләнгән, тип хәбәр итә юғары уҡыу йортоноң матбуғат хеҙмәте. Силәбе өлкәһендә 166 меңдән ашыу башҡорт йәшәй. Былар барыһы ла ауыл буйынса иҫәпләнмәй. Был осраҡлы түгел, сөнки башҡорттар – Уралдың тәүге төп этностарының береһе, Көньяҡ һәм өлөшләтә Урта Уралдың, Башҡортостандың һәм шул уҡ исемдәге тарихи өлкәнең төп халҡы. Башҡорт милләтенең таралыу үҙәге булып Арғаяш (халыҡтың 60 проценты) һәм Ҡоншаҡ (47,4 %) райондары төп урынды биләй. Уларҙың 84,3 проценты туған телен белә.

Әҙәби башҡорт теле милли нигеҙҙә XX быуаттың беренсе сирегендә барлыҡҡа килгән. Быға тиклем этносыбыҙ вәкилдәре Урал-Волга буйы төрки телен файҙалана. 1928 йылға тиклем башҡорттар – ғәрәп алфавитына, 1929 йылдан – латин алфавитына, 1939 йылдан һуң рус алфавитына нигеҙләнгән. Силәбе дәүләт университеты китапханаһында башҡорт халҡы тураһында уникаль коллекция тупланған.

Тарих, мәҙәниәт, тел тураһында мәғлүмәттәрҙе «Силәбе өлкәһе» энциклопедияһынан алырға мөмкин. Унда бик күп мәҡәләләр, шул иҫәптән башҡорттар тураһындағы мәғлүмәттәр авторҙары – Силәбе дәүләт университеты уҡытыусылары. Мәҫәлән, тарих-филология факультеты ғалимдары Ғәҙел Вәлиев менән Андрей Рыбалконың мәҡәләһе энциклопедияның башҡорт халҡының килеп сығышына, тарихына арналған өлөшөнөң беренсе томына инде. Икенсе донъя һуғышы осорондағы баҫмалар айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә. Улар араһында – билдәле башҡорт шағиры һәм драматургы Ҡадир Даяндың (1910-1975) «Йәшлек йыры» (Өфө: Башҡорт дәүләт нәшриәте, 1940) шиғырҙар йыйынтығы латин алфавиты нигеҙендә.

Шулай уҡ башҡорт телендә «Красноармеец китапханаһы» серияһынан «Хәрби фольклор» (Өфө: Башгосиздат, 1944) кириллица нигеҙендә. Был әҫәрҙәр тыуған төйәккә, тыуған ергә, ғаиләгә һәм яҡындарға ҡарата яҡты һөйөү тойғоһо менән һуғарылған.

Бөйөк Ватан һуғышының тәүге көндәренән алып Ҡадир Даян Ҡыҙыл Армия сафында була. 115-се уҡсылар полкында Калинин фронтында һуғыша. «На разгром врага» («Дошманды тар-мар итеүгә» гәзите сығара. Берлинға барып етеп, рейхстаг стеналарына ҡултамға ҡалдыра. Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм бик күп миҙалдар менән бүләкләнгән. Тәҡдим ителгән башҡа баҫмалар араһында, һис шикһеҙ, билдәле шағир һәм журналист Сәләх Кулибайҙың «Һайланма әҫәрҙәр»е (1910-1976) ҙур ҡыҙыҡһыныу уята (авторҙың титуллы биттә ҡултамғаһы менән автографы ҡуйылған). Башҡорт һәм рус телдәрендә «Башҡорт шәжәрәләре», башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә «Башҡорт халыҡ риүәйәттәре һәм легендалары», «Башҡорт әкиәттәре» һ.б. индерелгән.

ЯҢЫЛЫҠТАР

# ОКТЯБРҘӘ КҮК СЕРҘӘРЕ

**Көҙгө күк йөҙө бик күп ҡыҙыҡлы нәмәләр менән һуғарылған, бигерәк тә ҡараңғы ваҡытта.**

2023 йылдың октябрендә Ерҙә йәшәүселәр бер юлы бер нисә ҡыҙыҡлы астрономик күренешкә шаһит буласаҡ.

**8 октәбрҙә** «Драконидтар» метеор ағымының иң көсәйгән мәле. Метеорҙарҙың тиҙлеге төрлөсә. Ағым 6 октябрҙән 10 октябргә тиклем дауам итә. 21 октябрҙә «Драконидтар» метеор ағымының иң көсәйгән мәле. 1 сәғәт эсендә 25 метеорға тиклем күҙәтергә мөмкин. Ағым 2 октябрҙән 7 ноябргә тиклем дауам итә.

**14 октябрҙә** ҡулсалы Ҡояш тотола. Был күренеште беҙҙә күреү мөмкинлеге булмаясаҡ. Уны тик Америка халҡы ғына күҙәтә аласаҡ.

**29 октябрҙә** өлөшләтә Ай тотола, беҙҙә күҙәтеү мөкинлеге буласаҡ. Был күренеш 00:35 башлана, 01:14 максимумға етәсәк. Ай дискыһының 0,12 өлөшө ер күләгәһенә инәсәк. 01:12 тамамланасасҡ.

**Сатурн** (m=+0.6) көньяҡ-көнсығышта Һыуғояр йондоҙлоғонда күҙәтелә. Ай башында төнгө дүрттәрҙә байый, ай аҙағында инде ике сәғәткә алдараҡ беҙҙең менән хушлаша.

**Меркурий** (m=-1.0) айҙың тәүге көндәрендә иртәнсәк көнсығышта офоҡ өҫтөндәге Ҡыҙ йондоҙлоғонда беҙҙе сәләмләй. Планета Ҡояш менән тиҙ арала яҡынлаша. 29 октябрҙә Ҡояш менән ҡушылышта. Был датанан һуң ул киске күктә пәйҙә була, тик Ҡояшҡа яҡынайыу сәбәпле беҙгә күренмәйәсәк.

**Венера** (m=-4.4) иртәнсәк ныҒ һәйбәт күҙәтелә. 24 октябрҙә планета Ҡояштан иң алыҫ мөйөшлө араүыҡта була. Ҡояштан 5,5 сәғәткә алдараҡ – төнгө өстәрҙә ҡалҡа. Таңда көньяҡ-көнсығышта офоҡтан юғарыла урын алған Арыҫлан йондоҙлоғон биҙәй.

**Юпитер** (m=-2,9) кискеһен ҡалҡа. Төн уртаһында көньяҡта офоҡтан юғарыла Ҡуҙы йондоҙлоғонда күҙәтелә. Таңда көнбайыш офоҡҡа табан күсә.

**Марс** (m=-1,6) Ҡояшҡа нык яҡынайыу сәбәпле күренмәй.

2023 йылдың октябрь тотолоуы: Ҡояш һәм Ай тотолоуы ярты йылға бер тапҡыр, улар араһындағы осор ике аҙна. Был күк спектаклдәрендә Ҡояш, Ер һәм Ай бер һыҙыҡҡа теҙелә. Әгәр Уртала Ай булһа, кешеләр ҡояш тотолоуын күҙәтә, Ә Ер булһа – ай тотолоуын.

**«Арғужа» гәзитенең барлыҡ сығарылыштарын түбәнге QR код аша табырға була.**

Махсус битте Марат Абдулвәлиев әҙерләне. Тәржемә: Нурия Иҡсанова. Мәҡәләләрегеҙҙе түбәндәге адрес буйынса килтерегеҙ:
Арғаяш, Комсомол урамы, 25, «Арғаяш-Медиа». Яңылыҡтар өсөн телефон: 8 (35131) 2-01-69. Беҙҙең электрон почта: argayash-m@yandex.ru.